Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение основная обющеобразовательная школа с. Бриштамак муниципального района Белорецкий район Республики Башкортостан

Сценарий праздника
«А ну-ка, девушки!»

(на башкирском языке)

Составила: учитель технологии

Гадельшина Г.Б.

Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар!

Һигеҙенсе март байрамына арналған кисә (6-9 класс ҡыҙҙары өсөн).

Зал байрамса биҙәлгән. Талғын ғына көй яңғырай.

Алып барыусы; Көндөң яҡтылығы- ҡояшта, күктең матурлығы – йондоҙҙарҙа, ерҙең гүзәллеге – ҡыҙҙарҙа. Һигеҙенсе март ҡатын- ҡыҙҙарҙы ололау көнө, матурлыҡ байрамы. Әлеге байрам башҡа байрамдарҙан яҡтыраҡ та, йылыраҡ та, мөләйемерәк тә шикелле. Хөрмәтле ҡатын-ҡыҙҙар һеҙҙе бөтөн ер йөҙөн биҙәгән яҙ байрамы менән ҡотлайбыҙ. Һеҙгә оҙон ғүмер, йылмайып балҡыған ҡояш матурлығы, уҡыуығыҙҙа уңыштар теләйбеҙ!

Беҙ бөгөнгө кисәбеҙҙе гүзәл һәм уңған ҡыҙҙарыбыҙға бағышлайбыҙ. Кисәбеҙҙең исеме лә “Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар!” тип атала. Әйҙәгеҙ,хөрмәтле тамашасылар, ҡул сабып ҡыҙҙарыбыҙҙы сәхнәгә саҡырайыҡ. (ҡыҙҙар сыға).

Хөрмәтле дуҫтар! Һәр осрашыу танышыуҙан башлана. Бына шул тулҡынландырғыс минуттар ҙа килеп етте. Иң элек беҙ бөгөнгө бәйгене баһалаясаҡ жюри ағзаларын һайлап үтәйек.

Жюри һайлана.

Жюриның ғәҙел булыуын, ә тамашасыларҙың ҡыҙҙарҙың күңелдәренә дәрт-дарман өҫтәп, алҡыштарын йәлләмәүен теләйбеҙ. Шулай итеп бәйгенең беренсе бүлеген башлайбыҙ. Ул **“Таныш булайыҡ”** тип атала. Бер- береһен сәләмләү өсөн һүҙҙе ҡыҙҙарҙың үҙҙәренә бирәйек. Рәхим итегеҙ! (Командалар сығыш яһай).

А.Б. Командалар бик матур итеп сығыш яһанылар. Рәхмәт һеҙгә!

Икенсе конкурс “Интеллектуалдар”. Командаларға өсәр һорау бирелә.

Һаҡалы бар, аҡылы юҡ, ул нимә? (кәзә)

Үҙе суфый, үҙе урлаша, тотһаң тырнаша? (бесәй)

Ҡош түгел, ҡанатлы? (балыҡ)

Мамыҡ юрған, ҡат-ҡат һырыған. Үҙе һыуыҡ. (ҡар)

Йәй буйы ял итәләр, ҡышын атлап китәләр? (саңғылар)

Йәйеп тотһаң табаҡтай, йыйып тотһаң таяҡтай? (зонт)

А.Б. Киләһе конкурсты беҙ **“Модельер” (өй эше)** тип атанык. Бар яктан да уңған, хатта ҡул эшенә лә оҫта ҡыҙҙарыбыҙ үҙ ҡулдары менән теккән оригиналь күлдәктәр коллекцияһы һеҙҙең өсөн! Рәхим итегеҙ, ҡыҙҙар! (музыка аҫтында оригинал кейкмдәр күрһәтеү)

А.Б. Шулай итеп, ҡыҙҙарҙың оҫта ҡуллы икәндәрен дә күрҙек. Рәхмәт! Жюри ҡыҙҙарҙың эштәрен баһалай. Рәхим итегеҙ! (Жюри баһалар менән таныштыра).

“Оҫталык” конкурсы. Салфетка төрөү, төшкө ашҡа өҫтәлгә приборҙар ҡуйыу.

А.Б. Ҡыҙҙар йырлай, ҡыҙҙар бейей,

Ҡыҙҙар гүйә оса ғына.

Хискәйҙәрен ҡанат итеп,

Гүзәл йәшлек ҡосағында.

Беҙҙең ҡыҙҙар моңло ла, дәртле лә, йырға маһир, бейеүгә оҫта ла ул. Быға беҙ киләһе конкурс барышында инанырбыҙ. Шулай итеп, **“Ижади оҫталык” конкурсын (өй эше)** башларға ваҡыт етте. Тәүге конкурсанттарҙы сәхнәгә саҡырабыҙ! (командалар һәләттәрен күрһәтә).

Сығыштарҙы баһалайбыҙ. Жюриға һүҙ бирелә.

А.Б. Матур итеп үрелгән, зауыҡ менән киҫтерелгән сәс ҡатын-ҡыҙҙы тағын да күркәмерәк күрһәтә. Был бәйгелә ҡыҙҙарыбыҙ үҙҙәренең сәс үреү, прическа яһау оҫталығын дәлилләргә тейеш.

Музыкаль номер.

Ҡыҙҙар үҙҙәренең эштәрен күрһәтә. (прическаларын).

А.Б. Капитандар ярыша.

Бауға бәйләнгән алманы ашайҙар. Кем тиҙерәк? **(Музыка)**

А.Б. Килдер әле перчатканы,

Ҡул яҙып алайым әле.

Ошо разрядлы көслөнө,

Бер еңеп алайым әле.

Был бәйге «Ҡул көрәше» тип атала. (Музыка).

А.Б. Хөрмәтле дуҫтар! Бәйгебеҙҙе дауам итәбеҙ. Командаларға өй эше итеп бирелгән эштәрҙе ҡарайбыҙ. Ҡыҙҙарыбыҙҙың ҡул эштәре йөҙҙө ҡыҙартыллыҡ түгел. Йәгеҙ әле, ҡыҙҙар, күҙ нурҙарығыҙҙы, күңел йылығыҙҙы ҡушып бәйләгән эштәрегеҙҙе күрһәтегеҙ. (**Музыка).**

А.Б. Яратығыҙ, алҡышлаҡыҙ,

Хәер-фатиха һеҙҙән.

Скакалканан һикереү,

Еңеү көтә бит беҙҙән.

Алдағы бәйге – бер минутҡа скакалканан һикереү. (Музыка).

А.Б. Минеңсә матур ҡыҙҙар уңған хужабикәләрҙә булырға тейештер. Ул аш-һыу оҫтаһы ла, тегенсе лә, баҡсасы ла, йәмғеһе бар яҡлап та. Шуның өсөндә ул ниндәй генә хәл килеп тыуһа ла, юлын табырҫға тейешер.

Ә хәҙер мин ҡыҙҙарыбыҙға һорауҙар бирәм, һәр бер дөрөҫ яуапҡа бер бал ҡуйыла. Тик беҙҙең һрауҙар ябай түгел, ә ҡыҙыҡлы. Бик иғтибарлы булығыҙ.Һорауҙарҙың яуаптары уларҙың киреһе лә булыуы мөмкин.

Ниндәй пасудана ашап булмай? (буш)

Бер йомортҡа өс минут бешә. Ә ике йомортҡа нисә минут бешә? (өс минут)

Ҡайһы ҡул менән сәйҙе болғауы уңайлы? (ҡалаҡ менән болғайҙар).

Нимәне сей килеш ашап булмай, ә бешкәс ташлайҙар? (лавр япрағын).

Ас ҡарынға нисә йоморҡа ашап була? (берҙе, ҡалғандары ас ҡарынға булмай).

Тишек биҙрә менән нисек һыу килтерергә? (туңдырып).

Нинәй мейестә икмәк бешереп булмай? (домен мейесендә).

Икмәкте нимәһеҙ бешерп булмай? (ҡыртышһыҙ).

А.Б. Ә хәҙер уйындар уйнап алайыҡ.

- “Терпекәйҙәр” уйыны- алманы арҡала , тубыҡланып ташыу. Кем тиҙерәк?

- Һәр командана берәр кеше ҡурсаҡ кейендерә. Кем тиҙерәк?

- Бәйле күҙ менән “бәпес” ашатыу (йогурт ҡулланыла) (тамашасылар араһынан берәр малай саҡырыла, улар ултырғыста ултыралар)

А. Б. Хөрмәтле тамашысылар**,** бәйге булғас еңеүселәрелә була, уларҙы билдәләр ваҡыт етте. Жюри үҙ эшенә йомғаҡ яһағансы, командаларҙың музыкаль сәләмдәрен тапшырайыҡ.

Музыкаль сәләм.

Жюриға һүҙ.

Командаларға бүләктәр тапшырыу.

А.Б. Байрам кисәбеҙ аҙағына яҡынлашты.

Беҙ теләйбеҙ һеҙгә оло бәхет,

Күңелдәрҙә булған саф хистәр,

Оҙон ғүмер, яҡты, тыныс тормош-

Беҙҙең һеҙгә әйтер теләктәр.

Киләһе осрашҡанға тиклем, һау булығыҙ! Ә хәҙер байрам дискотекаһы.